Муллағәлина Миләүшә Хәлил ҡыҙы

# "Башҡортостаным - тыуған төйәгем"

# йондоҙ сәғәте



**Маҡсат:**

- уҡыусыларҙың Башҡортостан Республикаһы тураһындағы белемдәрен дөйөмләштереү;
- зирәклек, отҡорлоҡ, ослоҡ, фекерләү һәләттәрен үҫтереү;
  тыуған еребеҙгә, уның гүзәл тәбиғәтенә һөйөү, бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазиналары менән ғорурланыу тойғолары уятыу, уларға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү,күренекле кешеләре менән ғорурланыу тойғолары уятыу.

**Йыһазландырыу:** мультимедиа проекторы, номерҙар билдәләнгән карточкалар, йондоҙсоҡтар, магнитафон, фотоһүрәттәр.

## Уйындың барышы

**I. Ойоштороу**

**Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар һәм тамашасылар! Һеҙҙе Башҡортостаныбыҙ буйлап сәйәхәт итергә «Йондоҙло сәғәт» уйынына саҡырам. Уйында уҡыусылар үҙҙәренең белемдәрен, зирәклеген, отҡорлоғон күрһәтер тип ышанам.**

**Кемдәр уйнарға ярата,**
**Кемдәр тапҡыр һәм етеҙ,**
**Беҙҙең менән ярышырға**
**Кемдәр теләй әйтегеҙ?**

**Беҙҙең менән ярышырға**
**Аҡыл һәм белем кәрәк,**
**Кемдәр ярышырға әҙер,**
**Сығып баҫығыҙ тиҙерәк.**

Һеҙгә 3 төрлө уйын тәҡдим ителә, һәр уйында 3-әр һорау. Дөрөҫ яуапҡа йондоҙсоҡтар бирелә бара.Һәр уйындан һуң йомғаҡ яһала. Иң әҙ йондоҙ йыйған уҡыусы уйындан сыға бара.



# I тур

- Башҡортостаныбыҙҙың байлығына туҡталайыҡ




(Таҡтала, һандар аҫтында ағас һүрәттәре һәм исемдәре бирелгән. Уҡытыусы әҫәрҙән өҙөк уҡый, ниндәй ағас тураһында һүҙ барһа, уҡыусылар шул номерлы сигнал карточкаларын күтәрә)

| 1 | 2 | 3 | 4 |
|---|---|---|---|
| ҡайын | саған | имән | муйыл |







1) Йәй ҙә, ҡыш та ап-аҡмын,
Күрәкмәй кершән-фәлән.
Урмандың ҡап-ҡараһын да
Мин бит яҡтырта беләм. **№1ҡайын**
(Ф.Мөхәмәтйәнов «Ағастар ҡышын ни һөйләйҙәр»)

2) Бөтәгеҙ ҙә яҙҙы ашҡынып көтәһегеҙ, мин генә уның килеүенән ҡурҡып ултырам. Япраҡ ярып, ап-аҡ сәскәгә төрөнәсәгемде уйлайым да ҡалтыранып китәм.

**№ 4 муйыл**

3) Был ағастың япраҡтары елһеҙ көндә лә ҡыштырлашып, шыбырлашып, һөйләшеп ултыралар.

**№ 3 имән**




1 Ағиҙел    2 Ҡариҙел    3 Һаҡмар    4 Дим







1) **Башҡортостандағы иң ҙур йылға?** **№1 Ағиҙел**

2) **Был йылға беҙҙең район аша үтеп, Ағиҙелгә барып тоташа** **№ 4 Дим**

3) **Ҡайһы йылға русса Уфимка тип йөрөтөлә?** **№ 2 ҡариҙел**




1 Урал    2 Сусаҡ    3 Янғантау    4 Ирәндек







1) Беҙҙең райондағы бейек тау. № 2 Сусаҡ

2) «Хәҙер инде өйрәндек!» Ниндәй тау тураһында әкиәт? № 4 Ирәндек

3) Башҡортостандағы иң ҙур тау? №1 Урал

## I I т у р

- Тереклектәр

Ҡырағай хайуандар





1 ҡуян 2 төлкө 3 бүре 4 айыу











## Телеграмманы кем ебәргән?

1) «Килеп етә алмаҫмын, ҡойроғом мәкегә ҡуша туңды» № 3 бүре

2) «Килер инем, төлкө өйөмдән ҡыуып сығарҙы» №1 ҡуян

3) «Ҡойроҡһоҙ ҡалдым, килергә оялам» № 4 айыу




1 бөркөт 2 өкө 3 тумыртҡа 4 турғай





1) Башҡортостандағы иң ҙур йыртҡыс ҡош **№ 1 бөркөт**

2) Был ҡошҡа һәйкәл ҡуйылған **№ 4 турғай**

3) «Эй яратмай ҙа инде мине кешеләр! Тауышым йәмһеҙ, имеш. Имеш, күҙҙәрем ямаҡ. Әгәр мин булмаһам күптәр икмәкһеҙ ултырыр ине»

**№ 2 өкө**






| 1 | 2 | 3 | 4 |
|---|---|---|---|
| ат | эт | бесәй | һыйыр |





1) 2 һөҙгөсө, 1 һелтәгесе
   4 йөрөгөсө бар. **№ 4 һыйыр**

2) Һөттө бигерәк ярата,
   Йөн йомғағын уйната.
   Арып туйғас уйынлан,
   Мендәргә менеп ята. **№ 3 бесәй**

3) Кешенең дуҫы, йорттоң хужаһы. **№ 2 эт**

## I I I т у р









1) Шағирә, поэтесса Гөлфиә Юнысованың тыуған ауылы. № 2 Һарыш

2) Әлшәй районының үҙәге . № 4 Раевка

3) Популяр эстрада йырсыһы Рөстәм Ғизәтуллиндың тыуған ауылы.
№ 3 Яңы Сәпәш




| 1 | 2 | 3 | 4 |
| --- | --- | --- | --- |
| Әбйәлил | Күгәрсен | Әлшәй | Ғафури |





1) Был район исемле егет күлде аҫып ҡуйырға арҡан ишкән. №1 Әбйәлил

2) Башҡорт халыҡ яҙыусыһының фамилияһы бирелгән район. № 4 Ғафури

3) Ҡайһы район оса? № 2 Күгәрсен



1 Салауат | 2 Ишембай | 3 Өфө | 4 Күмертау

   



**1) Башҡортостандың баш ҡалаһы.** **№ 3 Өфө**

**2) Был ҡаланың исеме башҡорт халыҡ геройы хөрмәтенә бирелгән.**
**№1 Салауат**

**3) Был ҡала янында таш күмер сығарыла.** **№ 4 Күмертау**

## Финал

**Әлшәй йондоҙҙарын һанарға.**

*Ярышты башлар алдынан йондоҙҙар һанала. Кемдең йондоҙо күберәк, шул ярышты башлай. Исемдәр ҡабатланырға тейеш түгел.*

Әлшәй йондоҙҙарын һанағыҙ





**Еңеүсене билдәләү.**

***Йондоҙҙарҙы һанау. Кемдең йондоҙҙары күберәк, шул еңеүсе була.***

**Уйынсыларға бүләктәр тапшырыу.**

**Уйынды йомғаҡлау.**

Уҡыусылар, һеҙ Башҡортостандың яҡты киләсәге, уның матур өмөтө. Тыуған илебеҙ, тыуған еребеҙ һеҙҙең ҡулда.Ә бының өсөн һеҙ бәләкәйҙән илебеҙҙе ҡәҙерләргә, илдең үткәнен, бөгөнгөһөн белеп йәшәргә тейешһегеҙ.

Башҡоротостан – минең йән төйәгем,
Башҡоротостан – минең ырыҫым!
Башҡоротостан йәмен, ҡотон һаҡлау
Һинең, минең уртаҡ бурысым!